*Зөһрә АЛТЫНБАЕВА*

# ШӘП ЕГЕТ УЛ, Байегет



*Башкортостандың атказанган артисы Сәгизулла Байегет*

...Бөгөн Иҫке Сибайҙа байрам — Һабантуй. Унда ауыл урамдары бәйгеһенә йомғаҡ яһала, еңеүселәр билдәләнә. Һәр йорт, һәр ихата ошо күркәм сараға үҙ өлөшөн индерергә, һыр бирмәҫкә, үҙ урамын еңеүгә илтергә ынтыла. Хужабикәләр һый-хөрмәт, ҡул эштәре өлкәһендә оҫталығын күрһәтһә, ир-егеттәр таһыллыҡ, көс һынашыу, тормош-көнкүреш йәһәтенән дә маһирлығын асырға тырыша. Баймаҡтар сая, әүҙем халыҡ. Йыр-бейеүҙә уларға тиңләшеүе еңелдән түгел. Әлеге бәйгелә лә оҫта йырсылар, бейеүселәр бихисап. Бына майҙан уртаһына ун ике йәштәр самаһындағы һонтор кәүҙәле, сая ҡарашлы бер үҫмер килеп сыҡты. Эргәһендәге гармунсыға баш ҡаҡты һәм әкрен генә йырлай башланы. ”Өфө ҡалаһы ни өсөн матур” тигән йыр ине был. Үҫмер йырлаған һайын тауышы көрәйә, көсәйә, моңлана барҙы. Гармунсы Миңнулла Бикҡолов ағаһы ла ҡушылып йырлашты. Бик матур килеп сыҡты. Халыҡ дәррәү алҡышланы үҙҙәрен. Тағы ла йырлатырға иҫәптәре бар ине, әммә йырсы майҙандан сығып ҡасҡайны инде. Сәғиҙулла Байегетовтың сәхнәгә тәүге сығыуы ине был. Оло сәхнәгә уңышлы юлы шулай башланғайны.

Сәғиҙулла ишле ғаиләлә тыуып үҫә: алты баланың иң кинйәһе (әйткәндәй, уларҙа кинйәкәү тип йөрөтәләр). Әсәһе Әминә Сәлимгәрәй ҡыҙы менән атаһы Исмәғил Оморҙаҡ улы Байегетовтар Иҫке Сибайҙа бик абруйлы, уңған, дәртле ғаилә һанала. Сәғиҙулланың ағалары һәм апалары төрлө һөнәр кешеләре, ә ул, үҙенең хыялына тоғро ҡалып, сәнғәт юлын һайлаған. Һәм яңылышмаған.

Уның йыр-моң иленә аяҡ баҫыуы үрҙә әйтелгән бәйгенән һуң әүҙем төҫ ала. Сәғиҙулланы ауылда, районда, төбәктә уҙған төрлө фестивалдәргә, конкурстарға йыш саҡыралар. Үҙенең дә ҡыҙыҡһыныуы арта. Алтынсы синыфта уҡығанда Әһлей Сөләймәнов етәкләгән ҡурай түңәрәгенә йөрөй башлай.

— Әһлей ағай бик оҫта музыкант ине, — тип иҫкә ала Сәғиҙулла. — Ҡурайҙа ла, скрипкала ла шәп уйнай торғайны. Беҙҙең Иҫке Сибайҙағы музыка мәктәбенә нигеҙ һалыусыларҙың береһе ул. Мәктәптә оркестр ойоштороп, байтаҡ йылдар уға етәкселек итте. Беҙҙең күңелдәрҙә моң уятыусы ул.

Тырышлыҡ уңышҡа илтә, тип юҡҡа ғына әйтмәгәндәр. Сәғиҙулла ла бер-бер артлы еңеү яулай. Һигеҙенсе синыфта уҡығанда уны шундай еңеүҙәренең береһе өсөн Волгоград ҡалаһына путевка менән бүләкләйҙәр. Артабан иһә Сәғиҙулла Өфөгә юллана һәм сәнғәт училищеһының ҡурай бүлегенә уҡырға инә. Училищелағы остазы, Башҡортостандың халыҡ артисы Ришат Рәхимовҡа бик рәхмәтле ул.

— Ҡурайҙа уйнау оҫталығына ла, сәнғәт серҙәрен асыуҙа ла, тормош һынауҙарын үтә белергә лә ярҙам итте ул миңә, — ти Сәғиҙулла. — Үҙе оҫта ҡурайсы, өҫтәүенә, яҡташ та булғас, һәр борсоған һорау менән уға мөрәжәғәт итә торғайным.

Сәнғәт училищеһын уңышлы тамамлаған егет артабан уҡыуын БДУ-ның Сибай педагогия институтында дауам итә, йыр-моң донъяһында ҡайнай, төрлө бәйгеләрҙә ҡатнаша. 1994 йылда Сибай дәүләт филармонияһы асылғас, режиссер Әлмира Ҡыуатова уны үҙҙәренә эшкә саҡыра. Тап ошо йылдарҙа Сәғиҙулла Байегетов эстрада йырсыһы булып таныла. Сибай филармонияһының ”Арҡайым” ансамбле составында ”Урал моңо” халыҡ-ара конкурсында лауреат исемен яулай. Сәғиҙулланың йыр бәйгеләрендә еңеүҙәре бихисап: ”Ирәндек моңдары” төбәк-ара бәйгеһе (1996 йыл), ”Актер йыры” (1998 йыл), ”Ысыҡ күл” телевизион йыр бәйгеһе (2005 йыл) һәм башҡалар. Әммә егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ, тигән әйтем тынғылыҡ бирмәй уға. Үҙенең киләсәген эстрадала ғына түгел, театр сәхнәһендә лә күрә Сәғиҙулла. Бирәм тигән ҡолона, сығарып ҡуйыр юлына, тиҙәр: 1997 йылда уны Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрына эшкә саҡыралар. Дәртләнеп-янып ижади эшкә сума ул. Театр сәхнәһендә байтаҡ көслө образдар ижад итә: ”Аҫылйәр”ҙә — Шәрәф, ”Ҡатынымдың исеме Морис”та — Роже, ”Салауат” драмаһында — Ҡәнзәфәр, ”Нәркәс”тә — Аҙнай, ”Башмағым”да — Ғәлимйән, ”Һуңғы Ғәйнә”лә — Атамыш һәм Утәй, ”Өс егет”тә — спортсмен егет Сәғиҙулла һәм башҡалар. Әйткәндәй, ”Өс егет — Азат, Азамат, Байегет” тамашаһы бына нисәнсе йыл инде һәр ваҡыт аншлаг менән үтә. Бында, әлбиттә, Сәғиҙулла Байегетовтың да тос



өлөшө бар. Тамашасылар, айырыуса йәш егеттәр һәм ҡыҙҙар уларҙың сәхнә оҫталығына һоҡлана, моңло йырҙарын тыңлап ҡыуана. Әйткәндәй, был шаян, дәртле, йырлы-моңло тамашаны икешәр-өсәр тапҡыр ҡараусылар бик күп.

Уҙған йыл "Байегеткә — 30" (йәш) тамашаһы ҙур уңыш ҡаҙанды.

— Киләсәктә ошо йүнәлештә эште әүҙемләштерергә ниәт бар, — ти Сәғиҙулла. — Мәҫәлән, "Өс егет"тең телевизион варианты донъя күрҙе. "Дүрт егет" (әлегә шартлы атама) кеүек тамашаның проекты ла күңелдә йәшәй. Моноспектакль әҙерләп күрһәтергә лә уйлап йөрөйөм. Был йәһәттән Зөһрә Бураҡаева ярҙам итергә теләк белдерҙе лә инде.

Сәғиҙулланың ҡыҙыҡһыныусан һәм тынғыһыҙ булыуы, үҙен төрлө яҡтан һынап ҡарарға тырышыуы ҡыуандыра. Әле ул Рәсәй театр сәнғәте академияһының (элекке ГИТИС) продюсерҙар бүлегендә уҡып йөрөй. Танылған йырсы һәм актерға продюсерлыҡ ниңә кәрәк, тиерһегеҙ.

— Минең девиз "Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ" тип әйткәйнем, шикелле. Хәҙерге заманда ижад кешеләренә продюсер бик кәрәк. Ана, Мәскәү йырсыларының һәр береһенең үҙ продюсеры бар. Ижад кешеһенең уңышы уларға ла бәйле. Шуға күрә продюсерлыҡ серҙәренә өйрәнеү киләсәктә миңә генә түгел, башҡаларға ла ярҙам итер, тип фаразлайым. Дөрөҫөн әйткәндә, миңә эште ойоштороусы, әйҙәүсе булыу элек-электән оҡшай. Үҙемдең проекттарҙы әҙерләгәндә лә был бик ярҙам итә. Бынан тыш, Мәскәүҙә белем алыу дөйөм үҫеш өсөн үтә файҙалы, күп нәмә бирә. Академияла бик талантлы сәнғәт әһелдәре лекция уҡый беҙгә. Актер ғүмер буйы өйрәнергә тейеш, тик шул саҡта ғына тормошсан, тамашасы күңеленә хуш килерлек образ ижад итә ала.

Мин үҙемдең абруйлы, таланттарға бай театрҙа эшләүемә ифрат ҡыуанам. Хөрмәт Үтәшев, Фидан Ғафаров, Хәмит Шәмсетдинов кеүек сәхнә уҫтандарынан күп нәмәгә өйрәнергә мөмкин. Эльвира Юнысова, Суфия Ҡорбанғәлиева, Гүзәл Маликова апайҙарҙың актер оҫталығына һоҡланып бөтә алмайым. Теге йәки был образ өҫтөндә эшләгәндә уларҙың кәңәштәре бик урынлы булып ҡала.

Эйе, ижад донъяһында ҡайнап йәшәй Сәғиҙулла. Театрҙа уйнау менән бер рәттән эстрада өлкәһен дә онотмай, әленән-әле төрлө бәйгеләрҙә, концерттарҙа ҡатнаша, призлы урындар, дипломдар яулай. Әлеге көндә уның ундан ашыу аудио- һәм видеокассетаһы донъя күргән. Был йәһәттән төрлө проекттарын тормошҡа ашырыуҙа Сулпан Асҡарова, Зөһрә Бураҡаева, Урал Иҙелбаевтарға рәхмәте ҙур. Тамашасы күңелен арбарлыҡ, йөрәк түрендә ҡалырлыҡ йырҙар ижад итеүе еңел түгеллеген яҡшы аңлай Сәғиҙулла. Шуға ла һәр йырын үҙенсә, ниндәйҙер яңы табыш менән тыңлаусыға еткерергә ынтыла ул. Уның үҙ иткән композиторҙары ла байтаҡ: Руслан Ниғмәтов, Ришат Сәғитов, Дамир Әҙелбаев, Нәғим Нуриманов, Гөлдәр Ишҡыуатова, Асия Ғәйнуллиналарҙың йырҙарын беренсе булып йыр һөйөүселәргә еткереүенә ихлас ҡыуана. Ретро йырҙарҙы ла онотмай йырсы: уларҙың бар асылын һаҡлап, үҙенсә өр-яңы биҙәктәр өҫтәп башҡарыуы менән тыңлаусы күңелен йәлеп итә. Әйтәйек, "Әсәйемә хат" йырын (Ғилман Иҙрисов һүҙҙәре, Рим Хәсәнов көйө) бер нисә быуын талантлы йырсылар башҡарып килә. Ә бына



*Улы Арыҫлан менән*

Сәғиҙулла уны үҙенсә йырлай һәм залда ултырған тамашасыларҙың күбеһенең күҙҙәрендә йылтыраған йәш бөртөктәре ғәзиз әсә менән бала араһындағы тәрән һөйөү хисен тағы бер тапҡыр кисерергә мәжбүр итә, әсәйҙәргә ихтирамды арттыра.

Сәхнә түренә сыҡҡандан алып бик күп ҡыҙҙарҙың йөрәгенә ҡуҙ һалған Сәғиҙулла Байегетов 2001 йылда Айгөл исемле ҡыҙға өйләнгән. Кәләше актриса ла, йырсы ла түгел, бухгалтер булып эшләй. Әлеге көндә ике йәшлек улдары Арыҫлан үҫә.

— Улыбыҙ бик теремек, беҙҙе ҡыуандырып үҫеп килә, — ти Сәғиҙулла. — Киләсәктә ҡустылары, һеңлеләре булыр, тип өмөтләнәбеҙ. Аллаға шөкөр, фатир бирҙеләр. Киләсәктә башҡорт халҡының һанын арттырырға иҫәп бар (үҙе ихлас ҡыуанып көлә). Республикабыҙҙа әсәләр, балалар хаҡында даими хәстәрлек күрелеүе ҡыуандыра.

Сәхнә йондоҙо ҡайҙа һәм нисек ял итә, тип һорағандар булһа, яуап әҙер: Сәғиҙулла сит илдәрҙә, диңгеҙ буйҙарында ял итеүгә ҡарағанда, тыуған яғына ҡайтыуҙы өҫтөн күрә. Ғөмүмән, байтаҡ йылдар ҡалала йәшәһә лә, ауыл тормошо күңеленә яҡын. Айырыуса бесән мәле етһә, күңеле ярһый башлай, тиҙерәк ҡулына салғы алып, йырлай-йырлай бакуй яраһы килә.

— Йәйҙе генә түгел, ауылдың ҡышын да яратам мин, — ти Сәғиҙулла Байегет. — Урамдан атлап барғанда аяҡ аҫтында ҡар шығырҙауы үҙе бер ғәжәйеп көй һымаҡ. Мин һәр Яңы йылды мотлаҡ ауылда — әсәйем янында ҡаршылайым. Үҙем генә түгел, ғаилә менән ҡайтабыҙ. Әсәйҙе лә ҡыуандырабыҙ, үҙебеҙгә лә үтә рәхәт.

Ҡыҫҡаһы, ижад донъяһында ҡайнап, тормоштоң һәр мәленең ҡәҙерен белеп йәшәй Сәғиҙулла. Тырышлыҡ уңыштар алып килә: 2004 йылда уға Башҡортостандың атҡаҙанған артисы тигән абруйлы исем бирелде.

— Был юғары исем уңыштарҙы баһалау менән бергә киләсәктә үҙемә тағы ла талапсанығаҡ булыу, әүҙем булыу бурысын йөкмәтә, — ти Сәғиҙулла. — Быны яҡшы аңлайым һәм ижадымдың бер минутын да бушҡа үткәрмәҫкә тырышам. Минең хыялым: киләсәктә башҡортса нәфис фильмда уйнау. Театрҙың үҙенсәлектәре булғандай, кино сәнғәтенең дә үҙ серҙәре бар. Әлегә тиклем Башҡортостан телевидениеһы аша күрһәтелгән ”Миҙал” фильмында уйнағаным булды. ”Таныш түгел таныштар” тигән яңы йыл тамашаһы ла ошо йүнәлештә эшләнгәйне. Әле бына башҡорт кинорежиссерҙарының өр-яңы нәфис фильм төшөрөүҙәрен ишеттем, унда мине лә саҡырмаҫтармы, тип көтәм.

Хыялың тормошҡа ашһын, ижади уңыштар һиңә, Сәғиҙулла Байегет.